*Зөһрә* **АЛТЫНБАЕВА**

# Йылдарында — йырҙары



*Абҙаҡ ауылы Башҡортостандың иҫ киткес гүзәл мөйөшөндә урынлашҡан. Тирәяҡтан мөһабәт тауҙар теҙмәһе ҡурсалап тора, уларҙың түбәләренә һомғол ҡайындар, мәғрүр ҡарағайҙар теҙелеп баҫҡан.*

*Элек-электән күрше Силәбе өлкәһенең Магнитогорск ҡалаһы халҡы Абҙаҡ тирәһен айырыуса үҙ итә. Әле совет заманы тип йөрөтөлгән йылдарҙа уҡ был яҡтарҙа Магнит ҡалаһы балалары өсөн иҫтәлеклә пионер лагерҙары урынлашҡайны. Йәй етеү менән урман-аҡландар гөрләп тора — ҡала балалары ял итә белә. Ә ауылдыҡылар эш менән мәшғүл: картуф баҡсаһын утарға, күмергә кәрәк. Уныһы бөтөүгә бесән мәле етә. Малайҙар һәм ҡыҙҙар эш араһында ғына бер аҙ ял итеп ала. Шулай ҙа иҫтәре китмәй. Әле бына күмәкләшеп, тамаша әҙерләп, ҡала балаларына концерт күрһәтмәкселәр. Ана, Роза ең һыҙғанып тотонған: әле мандолинала һыҙҙырып уйнай, әле йырлап ебәрә. Пионер лагерҙарының етәкселәре менән дә уртаҡ тел таба белә. Балалар иһә окшата уларҙың концерттарын, һәр сығыштарын күтәреп алалар, алҡышлап оҙаталар. Өҫтәүенә, тамаша бөткәс, ашханаларына саҡырып һыйлайҙар. Розаға иһә иң оҡшағаны — балаларҙың да, өлкәндәрҙең дә ихлас алҡышлауы, сәскәләр бүләк итеүе. Мотлаҡ ”әртискә”, йырсы буласаҡ ул. Йырҙарын кешеләр ихлас яратырлыҡ итеп йырлаясаҡ. Халыҡ яратмаҫаҫ, ниндәй артист була һуң ул?!*

Роза Сабирйән ҡыҙы Аҡкучукова
1950 йылда тыуған
Һыуғояр
Яратҡан ашы — бишбармаҡ
Кешеләрҙә әҙәплелекте ихтирам итә

...Ғаиләләрендә биш малай араһында бер генә ҡыҙ булғанғамылыр, Роза бәләкәйҙән ҡыйыулығы, тәүәккәллеге менән айырыла. Бер эшкә тотонһа, аҙағына еткермәйсә туҡтамай. Үҙен белә-белгәндән ”мин йырсы буласаҡмын” тигән хыялын да иҫтән сығармай. Әле мәктәпкә уҡырға барғансы уҡ өйҙәрендәге патефонды ”арытҡансы” әйләндерә торғайны. Бәхетенә күрә, пластинкалар ҙа етерлек. Фәриҙә Ҡудашева, Мәғәфүрә

Сәлиғәскәрова, Рамазан Йәнбәковтарҙың бөтә йырҙарын тиерлек өйрәнеп бөткәйне. Ата-әсәһе йырсы кешеләр түгел, ә бына Роза үҙен йырҙан башҡа күҙ алдына ла килтермәй. Шуға күрә, Абҙаҡ мәктәбен тамамлағас, Стәрлетамаҡ мәҙәни-ағартыу училищеһына юл тота. Һәләтле ҡыҙҙы бер һүҙһеҙ ҡабул итәләр училищеға. Әммә бер аҙ уҡығас, ниңәлер күңеле һүрелә Розаның. Күп уйлап тормай, училищены ташлап ҡайта ла китә һәм күрше Әбйәлил районының Байым ауылында клуб мөдире булып эшкә урынлаша. Ауылда йәштәр күп, күңелле. Шулай шау-гөр килеп эшләп йөрөгәндә ауылға танылған йырсы Хөсәйен Мәжитов етәкселегендәге артистар төркөмө килеп төшә. Бәхеткә күрәлер, ахырыһы, ул Роза йәшәгән апайҙарға фатирға төшә. Йырлай-йырлай йүгереп эшләп йөрөгән Розаға һоҡланып та, ҡыуанып та ҡарай Хөсәйен ағай:

— Һин ниңә сәхнәлә йырламайынса клубта эшләп йөрөйһөң? — ти ул Розаға.

— Мин, ни, тәжрибә туплайым, — ти ҡыҙ ҡыйыу ғына.

— Тәжрибә тупларға өлгөрөрһөң, һиңә мотлаҡ уҡырға кәрәк, — ти Хөсәйен ағай һәм Розаға бер ҡағыҙ яҙып тоттора. — Ошо ҡағыҙҙы сәнғәт училищеһында күрһәтерһең, — ти ул. — Иртәгә үк Өфөгә кит.

Фатир хужалары Сәкинә апай менән Сәлимйән ағай ҙа халыҡ артисының фекерен хуплағас, Роза риза була. Өфөгә килеп, училищеға барһа, имтихандар күптән тамамланған. Ярты юлда туҡтап ҡалырға яратмаған Роза был юлы ла аптырап ҡалмай: проректорға кереп китә. ”Мин бит халыҡ артисынан яҙыу алып килдем”, — ти ул.

— Проректор ағай миңә имтихандарҙы комиссия ҡабул итеүе, әлеге ваҡытта бер кем дә булмауы хаҡында аңлатырға тырышты, — тип йылмайып хәтерләй Роза. — Минең дә кире сигенергә уйым юҡ. ”Мин йырсы булырға теләйем, хәҙер йырлап күрһәтәм”, — тинем дә, йырлап ебәрҙем. Проректор минең ҡыйыулыҡҡа шаҡ ҡатты, буғай. Аптырағас, Лилиә Әхмәт ҡыҙы Кәримованы саҡыртты. Ул иһә мине тыңлап ҡарарға булды. ”Был ҡыҙҙың тауышы бик уникаль тембрлы”, — тине ул. Был һүҙҙәр мине тағы ла дәртләндереп ебәрҙе. ”Халыҡ артисы Хөсәйен Мәжитов үҙе ебәрҙе бит мине”, — тип һөйләнеүемде беләм. Ҡыҫҡаһы, Лилиә Әхмәт ҡыҙы мине үҙенең класына алды. Башҡа имтихандарҙы ла уңышлы тапшырып, сәнғәт училищеһында уҡый башланым.

Студент йылдары һиҙҙермәй генә үтә, әммә таланттар ошо мәлдә асыла. Роза ла өсөнсө курстан уҡ төрлө концерттарҙа әүҙем ҡатнаша. Йырҙарын һәр саҡ яратып ҡабул итәләр. Композитор Нариман Сабитовтың Мәксүт Сөндөклө һүҙҙәренә яҙған ”Ҡыр ҡаҙҙары” йырын иһә йәштәр ҙә, өлкәндәр ҙә ихлас үҙ итә.

Тап ошо мәлдә филармонияға Мәскәүҙән Фәтих Ихсанов режиссер булып ҡайта һәм бер-бер артлы ҡыҙыҡлы тамашалар ойоштора башлай. Уның ”Ҡаҙ өмәһе” тигән тамашаһы ла киң популярлыҡ яулай. Бына ошонда Роза Аҡкучукованың ”Ҡыр ҡаҙҙары” йыры бик урынлы була. Фәтих ағай тамашаны ошо йыр менән башлап ебәрәсәген әйтә.

— Минең өсөн был оло ышаныс ине, — тип хәтерләй Роза Сабирйән ҡыҙы. — Халҡыбыҙҙың матур бер йолаһы тергеҙелә икән, хуп күренеш. Ә йырымды бик йылы ҡабул иттеләр. Минең сәхнә ижадым-

дың сағыу бер күренеше булды ул. Был тамашала миңә Илфаҡ Смаков, Нәзифә Ҡадирова, Ғәлим Латипов, Венер Килмөхәмәтов, Хәнә Минһажева, Гөлсөм Хәбибуллина кеүек талантлы артистар менән бергә сығыш яһау бәхете тейҙе.

Артабан Роза ”Ирәндек” эстрада оркестры менән бергә сығыш яһай.

— Сәхнә кешене үҙенә бәйләп ҡуйғандай бит ул, — ти Роза Сабирйән ҡыҙы. — ”Сәхнә ауырыуы” тиәйемме. Йырлағаныңды халыҡ ихлас ҡабул итһә, алҡыштарға күмһә, тағы ла сәхнәгә сығаһы, йырлайһы ғына килеп тора. Сәхнә уттары үҙенә әйҙәй. Әммә һәр йырсының үҙ йыры, үҙ моңо булырға тейеш. Кем йырҙы ”асҡан”, тәүге тапҡыр башҡарған — ошо йыр ул артистыҡы булып ҡалырға тейеш. Беҙҙә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был мөһим ҡағиҙәне боҙоуға юл ҡуйыла. Бер үк йырҙы бөтә йырсылар ҙа башҡара икән, уның тәме бөтә. Әгәр һин быға тиклем кемдер йырлаған йырҙы башҡараһың икән, ул һинең башҡарыуыңда күп тапҡыр моңлораҡ, иҫ киткес, таң ҡалырлыҡ булырға тейеш. Әйтәйек, миңә Гөлсәсәк Шәрипова башҡарған ”Сейәләр” йыры бик тә оҡшай. Мин уны йырлайым да. Әммә мин уны Гөлсәсәккә ҡарағанда оҫтараҡ йырлайым, тип әйтә алмайым, сөнки ”Сейәләр” — Гөлсәсәк асҡан йыр. Минең үҙ йырҙарым етерлек. ”Һин ултыртҡан муйыл”ды ғына (Рамазан Шәғәлиев һүҙҙәре, Абдулла Хәлфетдинов көйө) алайыҡ. Күпме йылдар үтһә лә, популярлығын юғалтмай ул. Шул уҡ композиторҙың ”Аҡсарлағым” (Рәғиҙә Янбулатова һүҙҙәре) йыры ла үҙ тыңлаусыһын тиҙ тапҡайны. Рәғиҙә апай үҙе килеп, арҡамдан һөйөп, маҡтап киткәйне. ”Алтын балдаҡ” йыры иһә мине ғүмерем буйы оҙатып килә (Зәйнәб Биишева һүҙҙәренә А. Хәлфетдинов ижад иткән). Абдулла ағай менән бергәләп бер көн эсендә йыр итеп яҙҙырғайныҡ беҙ уны. Көйөн ишеткәс тә күңел түренә инеп ултырҙы был йыр һәм оҙаҡ йылдар радио, телевидение аша тик минең башҡарыуымда ғына яңғыраны. Оҙон ғүмерле, бәҫле, зауыҡлы йыр ул ”Алтын балдаҡ”.

Әлбиттә, Роза Аҡкучукова халыҡ йырҙарын да оҫта башҡара. Уның ”Ерән ҡашҡа”, ”Сибай”, ”Зөлхизә”, ”Түрәкәй”ҙе үҙенә генә хас биҙәктәр менән йырлауы тамашасы күңелен әсир итә. Ә ”Әбйәлил сеңләүе” халҡыбыҙҙың бай ҡомартҡыларының бәҫен күтәрә, йәмләй.

Йырсы ғүмере төрлөсә, әммә ул йырҙарында йәшәй. Роза Сабирйән ҡыҙы ла бына тиҫтә йылдан ашыу Башҡорт дәүләт филармонияһының баш администраторы вазифаһын атҡара, коллегаларына, йәштәргә ижад ҡомарын асырға, дәрт-дарман уятырға ярҙам итә. Шул уҡ ваҡытта йырҙар иленән, ижад һуҡмағынан ситләшмәй: йыш ҡына сәхнә түренән ижадын үҙ иткән тамашасыларҙы ҡыуандырып тора. Быйыл яҙ көнө лә шундай бүләк әҙерләне. Матур, олпат бүләк булды был юбилей концерты йыр һөйөүселәргә. Халҡыңа йыр бүләк итеү үҙе оло бәхет бит ул. Башҡортостандың атҡаҙанған артисткаһы Роза Аҡкучукова ижад һуҡмағының, тормош юлының матур емештәренә ҡыуанып йәшәй. Ейәне Батырхан, үҙенә ошондай матур ейән бүләк иткән улы Руслан менән килене Рәзилә өсөн шатлана. Ҡатын-ҡыҙ өсөн үҙеңде кәрәкле итеп тойоу, кемдәргәлер таяныс булыу оло бәхет бит. Ә бәхет тырыштарҙы, ныҡышмал һәм уңғандарҙы үҙ итә.